*Марат ЗӘЙНУЛЛИН,*
*филология фәндәре докторы, профессор*

# ҒАЛИМ ЯУЛАҒАН ҮРҘӘР



Башҡорт теле методикаһы фәнен үҫтереүҙә ҙур хеҙмәт ҡаҙанған ғалим Аҙнағолов Рафаил Ғәйнетдин улы 1941 йылдың 13 февралендә Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районының Үрге Үтәгол ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. Башланғыс белемде үҙ ауылында алып, артабан Октябрь урта мәктәбен (Сурай ауылы) тамамлағас, Совет Армияһында хеҙмәт итә. Әрмеләге өс йыл эсендә Волга буйы хәрби округының «За Родину» гәзитенә мәҡәләләр яҙа, шул редакцияның әҙәби берекмәһе, йәмәғәт эштәрендә ең һыҙғанып ҡатнаша. Тәүҙәрәк дивизиондың комсомол бюроһы, аҙаҡтан бөтә частың комсомол комитеты сәркәтибе вазифаларын башҡара. Шул йылдарҙың сағыу иҫтәлеге булып, уның архивында комсомолдың Куйбышев өлкәһе һәм ҡалаһы комитеттарынан күп һанлы Маҡтау грамоталары һаҡлана.

Армиянан һуң, бала саҡ хыялына тоғро ҡалып, ул Өфөгә юллана һәм Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инә. Башҡорт филологияһы донъяһындағы уға тәғәйен йүнәлеште арҙаҡлы ғалим Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев бирә. Атаҡлы профессор үҙенең талибы Р.Ғ.Аҙнағоловтың артабан фән юлынан китеүен күрә, һынай йөрөй, уны ғилми конференцияларҙа ҡатнаштыра, артабан уға аспирантурала уҡырға урын юллай.

1972 йылда СССР Фәндәр академияһы Тел ғилеме институтында аспирантура тамамлап, Р.Ғ.Аҙнағолов Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә ҡайта һәм башҡорт теленең диалектологик атласын төҙөү менән мәшғүл була. Төрлө төбәктәргә фәнни экспедициялар ойоштора, материал туплай, башҡорт һөйләштәренең төбәк (региональ) карталарын төҙөй, һәр һөйләштең үҙенсәлекле күренештәрен картаға төшөрә, ғилми отчеттар, мәҡәләләр яҙа.

1978 йылда уны Рәсәй Мәғариф министрлығы Белем биреүҙең милли мәсьәләләре институтының Башҡортостан филиалына эшкә саҡыралар. Бында 22 йылдан ашыу эшләү дәүерендә мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу методикаһын фән булараҡ үҫтереүҙә, уның теоретик һәм лингводидактик нигеҙҙәрен, принциптарын, методтарын асыҡлауҙа Р.Ғ.Аҙнағоловтың хеҙмәте ҙур. Уның ғилми етәкселегендәге авторҙар ҡоро башҡорт теле методикаһының тулы һәм фәнни кимәлдә эшләнгән вариантының тәүге баҫмаһын 1985 йылда сығарҙы. Ә 1996 йылда ошо китап, бер ни тиклем үҙгәртелеп, ҡабаттан нәшер ителде.

Баланың телмәре орфоэпик һәм орфографик хаталарҙан азат түгел. Шул хаталарҙы иғтибарлап анализлай башлаһаң, улар уҡыусының әсә теле үҙенсәлектәренә ҡайтып ҡала, сөнки ул ерле һөйләш нескәлектәрен үҙ эсенә ала. Тимәк, уҡыусының телмәре диалект шарттарында формалаша. Мәктәптә әҙәби тел нормаларына өйрәткән саҡта, баланың тамам нығынған тәбиғи телмәр ҡанундары иҫәпкә алынмай. Ошо күренеште, хәлде ентекләп өйрәнеп, Р.Ғ.Аҙнағолов «Диалект шарттарында башҡорт телен уҡытыу методикаһы» тигән хеҙмәтен яҙа һәм баҫтырып сығара.

Һуңғы йылдарҙа ғалим башҡорт теле методикаһының үҫтереүле принциптарын фәнни кимәлдә яҡтыртыуға күп көс һала. Әйтергә кәрәк, үҫтереүле уҡытыу концепцияһын күренекле психологтар Д.Б.Эльконин һәм В.В. Давыдов исемдәре менән генә атау таралған. Әммә шуныһы мәғлүм: үҫтереүле уҡытыуҙың алтын сылбыры сал тарих төпкөлөнә барып тоташҡан. Мәҫәлән: «Зиһенде (фекерләүҙе) телдән алда үҫтереү» (Я.А.Коменский), «Бала белемгә үҙенең эҙләнеүе аша эйә булһын» (Ж.Ж.Руссо), «Баланың логик фекерләүен үҫтереү» (И.Г. Песталоцци), «Уҡытыусының йүнһеҙе хәҡиҡәтте үҙе әйтеп бирә, һәйбәте уны табырға өйрәтә» (А.Дистервейг), «Баланың логик фекерләүен үҫтереү; туған тел — кешене үҫтереү сараһы» (К.Д. Ушинский), «Баланың ижади фекерләүен үҫтереү» (П.П. Блонский) һәм Л.С.Выготскийҙың мәшһүр ике зонаһы (актуаль үҫеш һәм яҡындағы үҫтереү зоналары). Үҫтереүле уҡытыуҙың педагогик һәм психологик нигеҙҙәре ана шулар һәм уның әллә нисә йөҙ йыл тарихы бар. Шағирсараҡ әйткәндә, үҫтереүле уҡытыу — үҙе иҫке нәмә, тик һәр психолог уны үҙенсә яңырта. Р.Ғ.Аҙнағолов үҙенең яңыраҡ донья күргән «Уҡыусы шәхесен үҫтереүҙең лингводидактик нигеҙҙәре» тигән монографияһында үҫтереүле уҡытыуҙың үҙенсәлекле принциптарын, методтарын башҡорт теле дәрестәрендә бойомға ашырыу проблемаһын, уның дидактик нигеҙҙәрен, тәбиғи асылын тасуирлап бирә, уҡыусы шәхесен үҫтереүҙә шаҡтай фәһемле һәм әһәмиәтле алымдар тәҡдим итә. Был хеҙмәтте башҡорт теле методикаһында ҙур бер ҡаҙаныш тип баһаламай булмай.

Р.Ғ.Аҙнағолов шулай уҡ республикабыҙҙа танылған лексикографтарҙың береһе. Ул йәмғеһе 100 табаҡҡа яҡын мәктәп һүҙлектәре сығарҙы: урта мәктәп уҡыусылары өсөн «Башҡорт теленең орфография һүҙлеге» (1988), «Башҡортса-русса мәктәп һүҙлеге» (1993), уҡытыусылар һәм юғары уҡыу йорттарының талиптары өсөн «Башҡорт теленең орфография һүҙлеге» (1998) һәм башҡа әсбаптары уҡыу йорттарында ҙур һорау менән файҙаланыла.

Р.Ғ.Аҙнағолов — мәктәп дәреслектәре авторы ла.Уның ғилми етәкселегендә авторҙар коллективы тарафынан төҙөлгән һәм 5-6 синыфтар өсөн тәғәйенләнгән «Культура Башҡортостана» исемле дәреслектәре рус һәм татар телдәрендә нәшер ителде. Әлеге көндә был дәреслектәрҙең яңыртылған варианты нәшриәткә әҙерләнә. Рафаил Ғәйнетдин улы башҡорт теле уҡытыусылары өсөн БИРО тарафынан ойошторолған курстарҙа, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа үҙенең йөкмәткеле лекциялары, докладтары менән әүҙем ҡатнаша.

Р.Ғ.Аҙнағолов киң профилле ғалим, үҙенең уҡытыусыһы, мәшһүр ғалим Ж.Ғ.Кейекбаевтың лекцияларын донъяға сығарыу буйынса ла ҙур эш алып бара. Быларҙың ҡайһы бер өлөштәре, мәҫәлән «Төрки телдәренең сағыштырма грамматикаһы» тигән ҙур ғына бүлеге Башҡортостан Фәндәр академияһының «Йәдкәр» журналының бер нисә һанында баҫылып та сыҡты. Әлеге көндә Ж.Ғ.Кейекбаевтың дөйөм урал-алтай телдәренең сағыштырма грамматикаһы мәсьәләләренә арналған лекциялар циклы айырым китап рәүешендә нәшриәткә әҙерләнә.

Аҙнағолов Рафаил Ғәйнетдин улының халыҡ мәғарифы өлкәһендәге хеҙмәттәре Башҡортостан һәм Рәсәй мәғариф министрлыҡтарының Маҡтау грамоталары менән билдәләнде. Уға хөкүмәтебеҙ тарафынан «Башҡортостан Республикаһы халыҡ мәғарифының атҡаҙанған хеҙмәткәре» тигән почетлы исем бирелде.